# Силәбе башҡорттарының бурыстары

Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты алдында ҙур эш тора: апрель-май айҙарында ҡала-райондарҙа йыйындар үткәреп, июндә өлкә ҡоролтайын саҡырыу. Уның бойомға ашырына, Силәбе өлкәһе губернаторының беренсе урынбаҫары А.Н.Косиловта булып, уның 39 район-ҡала етәкселәренә уҙғарыласаҡ ҡоролтайҙарға тейешле ярҙам, ойошҡанлыҡ күрһәтергә тигән рәсми хатын уҡығас бөтөнләй ышандым һәм шатландым. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (артабан БДБҠ) өсөн был бик мөһим сәйәси ярҙам һәм уны Силәбе менән Башҡортостан араһындағы дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек тураһындағы Килешеүҙең аныҡ үтәлеше, етәкселәребеҙҙең бер-береһен аңлап, Башҡортостан Республикаһы һәм Силәбе өлкәһе халыҡтары файҙаһына эшләүҙәренең өлгөһө итеп ҡабул итергә кәрәк.

Ҡоролтайҙарҙы үткәреү мәсьәләһенә күскәнгә тиклем, мин бер нисә һүҙ менән Рәсәйҙәге хәҙерге хәлдәр тураһында әйтеп үтмәксемен.

Рәсәйҙә сәйәси хәл бик ныҡ ҡатмарлашты һәм киҫкенләште. Минең фекеремсә, илдә күптән барған иҡтисади, сәйәси торғонлоҡ дауам итә һәм уның иң ҡурҡыныс күренеше булып Чечнялағы һуғыш һанала. Рәсәй Президенты В.В.Путин һәм уның командаһы рус булмаған милләттәрҙе йотоу, йәғни урыҫлаштырыу сәйәсәтен тормошҡа ашыра. Яңы паспорт индереү шуны раҫлай. Бөтә матбуғат баҫмалары, радио һәм телевидение аша йәш быуынды шовинистик рухта тәрбиәләү сәйәсәтенең алдан ҡоролған программаға ярашлы үткәрелгәненә көндәлек тормош шаһит. Урындағы халыҡтарҙың тарихы, милли мәҙәниәте, теле йәш быуынға тейешле кимәлдә өйрәтелмәй һәм ул уны белеп үҫмәй. Һуңғы 15-20 йыл эсендә генә һәр милләттә үҙ халҡы яҙмышына яуапһыҙ ҡараған маңҡорт быуын үҫеп килә һәм уға паспортында милләтен күрһәтеү, әлбиттә, ҙур әһәмиәткә эйә түгел. Һөҙөмтәлә милләттәр юғаласаҡ һәм Рәсәй дәүләте өсөн милли сәйәсәт тә бөтәсәк. Беҙ Рәсәйҙәге бөтә милләт халыҡтары



05-2001.p65 69 27.07.01, 12:02

менән бергә был ҡурҡынысты аңларға, уға ҡаршы торорға, милләтебеҙҙең яҙмышын хәл итер сараларҙы бөгөндән күрергә тейешбеҙ. Бының ысынбарлыҡ икәнлегенә Магнитогорск ҡалаһында булған хәл асыҡ миҫал. Бөтәгеҙгә мәғлүм, 1-2 мартта унда Башҡортостан менән Силәбе өлкәһенең иҡтисад һәм мәҙәниәт көндәре үтте. Мин Башҡортостан Республикаһы делегацияһының ойоштороу комитетында, ҡалалағы башҡорт милли мәҙәни үҙәгендә, ҡала китапханаһының башҡорт бүлегендә мәҙәниәт буйынса үткәрелгән түңәрәк өҫтәлдәр эшендә, ҡала ҡоролтайы башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышында ҡатнаштым. Тәьҫораттарым үтә ауыр. Мәҫәлән, ҡалала 20 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, кәмендә 4-5 мең тирәһе мәктәп йәшендәге башҡорт балаһы бар. Әммә бер генә мәктәптә лә башҡорт балаларына туған тел өйрәтелмәй, ҡалала бөтөнләй башҡорт мәктәбе юҡ. Мәктәпте булдырыу һәм ошо йүнәлештә тейешле саралар күрер өсөн, ике йыл элек БДБК инициативаһы менән ҡала активистарынан 800 ата-әсәнең балаларын махсус башҡорт мәктәбендә уҡытырға теләүен белдергән имзалы документ йыйҙырттайныҡ. Уны ҡала хакимиәтенә тапшырҙыҡ, ләкин В.Г.Аникушин һәм уның ярҙамсылары беҙҙең инициативаға, үҙ граждандарының теләгенә төкөрөп ҡараны. Мәҙәниәткә арналған түңәрәк өҫтәлдә ҡала хакимиәте урынбаҫары И.Скрытников ҡатнашҡайны, ул асыҡтан-асыҡ: «Беҙ был мәктәпте асмаясаҡбыҙ», — тип иғлан итте. Уға ышанманым, иртәгәһенә ҡала хакимиәте башлығына үҙем киттем. Мине, БДБК Башҡарма комитеты рәйесен, В.Г.Аникушин ҡабул итмәне, аптырағас, яңынан уның урынбаҫары И.Скрытниковтың кабинетына инеп һөйләштем. Бына уның өҫтәлмә яуабы: «Беҙ, Рәсәй сәйәсмәндәре, ваҡ халыҡтарҙың балаларын туған телендә уҡытмаясаҡбыҙ, башҡорт, татар, осетин, чечен, ҡалмыҡ, мари кеүек халыҡтарҙың мәҙәниәтен, милли телен үҫтереү — киләсәктә Рәсәйҙе дәүләт булараҡ тарҡатыуға ғына килтерәсәк һәм беҙ уға ҡаршы торасаҡбыҙ».

Рәсәй Президенты В.В.Путин төбәктәрҙә алып барылған был ҡурҡыныс сәйәсәтте бәлки белмәйҙер ҙә, әммә ул ысынбарлыҡ. Демократик ил принциптарын тормошҡа ашырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған Рәсәй өсөн был яман күренеш, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошо оятһыҙ сәйәсәт дауам ителә.

Алда уҙғарыласаҡ ҡоролтайҙарға һәм II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерләнгәндә, үҙебеҙҙең төп программаға ингән маҡсаттарыбыҙҙы тормошҡа ашырғанда, бөтә ошо ҡатмарлы хәлде аңлап эш итергә тейешлебеҙ.

II БДБК һәм быйыл Силәбе өлкә ҡоролтайына әҙерлек алып барғанда БДБК Башҡарма комитетының төп концепцияһы төҙөлгәйне. Ул шунан ғибәрәт:

В.В.Путин етәкселегендәге хәҙерге Рәсәй хөкүмәте урыҫ булмаған халыҡтарҙы урыҫлаштырыу, уларҙы йотоп алыу сәйәсәтен алға һөргәндә, башҡорт халҡының киләсәк быуаттарға, мәңгелеккә һаҡланып ҡалыуын артабан тәьмин итер өсөн, төп ойоштороу, аңлатыу эштәрен ғаилә кимәлендә алып барыуҙы хуш күрәбеҙ. Беҙҙең был фекер 2000 йылдың сентябрендә уҙғарылған Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары съезында хупланды. Унда 2001 йылды Әсә йылы тип иғлан итеү һоралғайны, беҙҙең үтенесебеҙҙе Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡабул итеп, махсус указға ҡул ҡуйҙы. Был оло шатлыҡ. БДБК Башҡарма комитеты ҡоролтайҙың бөтә ойошмаларына ла Әсә йылын нисек үткәрергә, ниндәй ойоштороу мәсьәләләре торасаҡ һәм улар нисек ҡаралырға тейеш тигән һорауҙарға яуап формаһында үҙенең тәҡдимдәрен әҙерләне. Бер нисә көндән улар Башҡарма комитеттың махсус ултырышында ҡаралып, раҫланды. Мин Башҡарма комитет исеменән район, ҡала һәм өлкә ҡоролтайҙарында ла тема итеп әсә, бала, йәш быуынды милли рухта тәрбиәләү, ғаиләнең иҡтисади, сәйәси, йәшәү шарттарын яҡшыртыу мәсьәләләрен күтәреүҙе һорайым.

Әлбиттә, беҙҙең алда торған бурыстар ҡатмарлы һәм яуаплы. Уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып үтәм.

Мин бөгөн, А.Н.Косилов менән осрашҡан саҡта, Силәбе ҡалаһының үҙендә Башҡортостан мәҙәни үҙәген булдырыу кәрәклеген әйттем. Бәлки уны Башҡортостан вәкиллеге менән бергә, бер йортта ойоштороу файҙалыраҡтыр. Ул йортта китапхана, телевизион-кино, төрлө уйын залдары булып, бында килгән кеше Башҡортостан хаҡында тейешле мәғлүмәт алырға те-



05-2001.p65 70 27.07.01, 12:02

йеш. Бәлки, шул уҡ Үҙәктә башҡорт балалары өсөн махсус мәктәп тә асылыр, тинем. Бындай Үҙәкте булдырыу — Силәбе өлкәһе менән Башҡортостан араһында барған төрлө тармаҡлы хеҙмәттәшлектең яҡты көҙгөһө буласаҡ. Силәбе ҡалаһында махсус башҡорт мәктәбе асыу — хәҙерге көн талабы. Быны элек тә аңлай инек, ләкин был йүнәлештә өлкә ҡоролтайы бер ниндәй аныҡ эш эшләмәне. А.Н.Косилов ҡуйылған мәсьәләнең мөһимлегенә, кәрәклегенә шунда уҡ төшөндө һәм шуға беренсе аҙым итеп Ш.Бабич исемендәге башҡорт һәм татар китапханаһында элек эшләп килгән, инде һүнеп ҡалған Башҡорт мәҙәни үҙәген тергеҙеү бурысын ҡуйҙы һәм Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Тәлғәт Хәйеровҡа уны тормошҡа ашырырға бойорҙо. Тәлғәт Ғәйнетдин улы был яуаплы эште үтәр тигән өмөттәмен. Ошондай ҙур, мөһабәт Үҙәкте Магнитогорск ҡалаһында ла ойоштороу кәрәк. Унда ла китапхана, төрлө залдары булырға тейеш. Милли үҙәк эргәһендә балалар баҡсаһы һәм мәктәп тә эшләһен ине. Силәбе өлкәһе Башҡортостан түгел икәнлеген беҙ яҡшы аңлайбыҙ, шуға ла милли мәсьәләләрҙе ҡуйған, уларҙы тормошҡа ашырыу маҡсаттарын күҙаллаған саҡта, һеҙгә тәүәккәллек, түҙемлек, даими талапсанлыҡ теләйбеҙ. Был өлкәлә һеҙ әүҙемлек күрһәтһәгеҙ, беҙгә лә һеҙгә ярҙам итер өсөн киңерәк мөмкинлектәр асыласаҡ. Ошо йәһәттән мин 1997—1998 йылдарҙа Силәбе һәм Башҡортостан араһында барлыҡҡа килгән хеҙмәттәшлекте, дуҫлыҡты киң рәүештә файҙаланыуығыҙҙы һорар инем. Мәктәп менән мәктәп, ҡала менән ҡала, район менән район, ойошма менән ойошма араһында даими аралашыу барырға тейеш һәм беҙ, Башҡортостан йәмәғәтселеге, ошо сараларҙы Силәбе өлкәһендәге милләттәштәребеҙҙең милли мәҙәниәтен, телен, рухи донъяһын, милли аңын үҫтереүҙәге иң ҙур ярҙамыбыҙ тип ҡарайбыҙ. Ҡалған фекерҙәремде Мөнир ағай Шаһиев биргән ундан ашыу һорауға яуап рәүешендә әйткем килә.

**— 1934 йылдағы Арғаяш менән Ҡоншаҡ райондарын, Башҡортостандан айырып, Силәбе өлкәһенә биреү тураһындағы ВЦИК ҡарарына нисек ҡарайһығыҙ?**

Әлбиттә, был хата сәйәсәт, большевиктарҙың башҡорт халҡын урыҫлаштырыу сәйәсәтенең асыҡ миҫалы булды. Бик йыш ҡына Арғаяш-Ҡоншаҡ милли округын аяҡҡа баҫтырыу хаҡында һүҙ сыға. Быны тәүҙә урындағы башҡорттар, Силәбе башҡорттары, күтәреп сығырға тейеш, шул саҡта беҙ һеҙҙе яҡлаясаҡбыҙ.

**— Башҡорт милли идеологияһының концепцияһы бармы, юҡмы?**

Минеңсә, I БДБҠ ҡарарҙары, унда ҡабул ителгән башҡорт халҡын тергеҙеү программаһының проекты ошо концепцияны тулыһынса үҙ эсенә ала һәм мөһим документтар иҫәпләнә.

**— Башҡортостандың дәүләт суверенитеты ниндәй дәрәжәлә һаҡлана?**

Беҙ суверенитетты иғлан иттек, уның принциптарын уңышлы ғына тормошҡа ашырабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәй составында үҙаллы Башҡортостан дәүләтен төҙөү төрлө ҡапма-ҡаршылыҡтар кисерә.

Һуңғы бер нисә йыл эсендә, бигерәк тә В.В.Путин Рәсәй Президенты итеп һайланғас, Башҡортостанға төрлө ҡыҫым көсәйҙе. Мәҫәлән, 1991—1997 йылдарҙа Башҡортостан Мәскәүгә милли доходтың 40 процентын түләһә, хәҙер инде уны тулайым түләйҙә тинләп кенә һорап ала. В.В.Путин федераль округтар төҙөнө һәм беҙ, башҡорт йәмәғәтселеге, ул округтарҙы Рәсәй дәүләтен милитаристик дәүләткә әйләндереү өлкәһендәге тәүге аҙымы итеп ҡабул иттек. Был сәйәсәт нигеҙҙә Мәскәүҙең Башҡортостан Президенты М.Ғ.Рәхимов, Силәбе губернаторы П.И.Сумин кеүек абруйлы дәүләт етәкселәренә ышанмай ҡарауының һөҙөмтәһе тип ҡарайбыҙ.

**— БДБҠ Башҡарма комитетында политсовет бармы?**

Бар. Уның вазифаһын Башҡарма комитеттың бюроһы атҡара.

**— Фәлсәфи һәм хоҡуҡ күҙлегенән ҡарағанда туған телде өйрәнеү мәжбүриме, әллә ихтыярмы?**

Был һорауға, минеңсә, яуап бер: үҙ милләтенең үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡайғыртҡан һәр бер кеше өсөн халҡыңдың телен, мәҙәниәтен, ғөмүмән, рухи донъяһын, тормошон белеү, үҙ балаңа уны өйрәтеү, аңлатыу иң изге бурыс булырға тейеш. Мәжбүри бурыс түгел, ләкин ул һәр кем тарафынан минуты-сәғәте менән йөрәге аша аңлап башҡарылыр тормош талабы.

**— Башҡортостан менән Татарстан араһындағы дәүләт-ара һәм ижтимағи ойошмалар менән мөнәсәбәт нисек?**



05-2001.p65 71 27.07.01, 12:02

Бөтәбеҙгә лә мәғлүм, ике республика президенттары даими рәүештә осрашып, бер-береһе менән мөһим мәсьәләләр буйынса фекер алышып тора. Ошо хеҙмәттәшлектә ике республиканың парламент депутаттары, хөкүмәт органдары дауам итә. БДБҠ менән БДТК араһында ла хеҙмәттәшлек урынлашты. Мәҫәлән, БДБҠ делегацияһы БДТК саҡырыуы буйынса 1998 йылда Ҡазанда булып, рәсми һөйләшеүҙәр алып барҙы. Быйыл беҙ БДТК делегацияһын Башҡортостанға саҡырырға һәм үҙ-ара аралашыуҙы артабан үҫтерергә уйлайбыҙ.

**— Казачествоға нисек ҡарайһығыҙ?**

Был мәсьәләнең ике яғы бар. Берҙән, казактар рус халҡының үҙаллы социаль, этник төркөмөн тәшкил итә. Улар быуаттар буйы хәрби хеҙмәткә йәлеп ителеп, даими рәүештә ошо бурысты башҡарған этник төркөм. Йәшәү шарттары казактарҙа үҙенсәлекле уй-фекер, төрлө йолалар тыуҙырған, ғөмүмән, башҡаларҙан бер аҙ айырылған менталитеты бар. Хәҙерге шарттарҙа казактарҙың ошо йолаларҙы һаҡлап алып ҡалырға тырышыуы тәбиғи, әлбиттә.

Икенсенән, насар яғын да күрмәй мөмкин түгел. Хәҙерге Рәсәй етәкселеге, хөкүмәте казактарҙы Рәсәйҙе полицей дәүләтенә әйләндереп бара, ошо йүнәлештә Рәсәй уны төп реакцион көс булараҡ файҙаланырға тырыша. Быны беҙ Төньяҡ Кавказда барған сәйәсәттә асыҡ күрҙек. Ставрополь өлкәһе казактары чечен һәм башҡа милләт халыҡтарын өлкәнән ҡыуырға, уларҙы кәмһетергә тырыша һәм рәсми дәүләт ошоно хуплай. Әгәр ҙә быға сикләү юҡ икән, урыҫ казактарының киләсәктә урыҫ булмаған халыҡтарға, уларҙың милли дәүләттәрен төҙөүгә, Рәсәйҙең демократик федератив ил йүнәлешендәге үҫешенә ҡаршы тороусы төп реакцион көскә әйләнеүе ихтимал.

Гете, кеше ғүмеренең оҙайлығы уның ихтыяр көсөнән тора, тигән. Халҡыбыҙҙың киләсәге беҙҙең ҡулда, беҙ ҙә ихтыяр көсөбөҙҙө берҙәм эшкә егеп, милләтебеҙҙең яҙмышын ҡурсалап ҡалайыҡ.




С целью координации совместной работы Исполкома с региональными организациями, а также для широкой пропаганды решений Исполкома Всемирного курултая башкир, выражая пожелания башкирского населения, мы создали областную общественно-политическую газету “Уралым” (“Родной Урал”).

Она зарегистрирована 13 марта 2000 года в Уральском региональном управлении по защите печати и СМИ в г.Екатеринбурге (Свидетельство № ПИ-11-0028).

Газета вошла в “Каталог” для организации подписки на II полугодие 2001 года. Индекс 54678.

Издается на башкирском и русском языках.

Примерная тематика и специализация:

— освещение экономической, социальной, культурной жизни области, соседних республик;

— деятельность органов власти в области национальной политики;

— поэзия;

— реклама.

**Газета выходит 2 раза в месяц. Подписная цена — 57 рублей за полугодие. Подписку можно оформить с каждого очередного месяца.**

*У.К.Сафиуллин,*
*главный редактор газеты “Уралым”,*
*заслуженный работник культуры Республики Башкортостан*



05-2001.p65 72 27.07.01, 12:02